Зөһрә АЛТЫНБАЕВА

# Индәрендә унын ил ғәме

Бар йыһанды ҡосоп шиғыр яҙа:
Үҙе — әсә, үҙе — шағирә.
Кем, тиһегеҙ, был исемгә лайыҡ?
Кинйәбулат ҡыҙы Кәтибә!

Һикәлтәле тормош, үткән йылдар
Маңлайына тәрән һыр һалған.
Сал ҡылғандар һымаҡ сал сәстәрең
Изгелектәр ҡылып ағарған.

*Башкорт дәүләт университетының «Шоңкар» түңәрәге ағзалары әҙибәне ололап һәм юбилейы айканлы котлап яҙған был юлдар Кәтибә апайҙың бик күп сифаттарын сағылдыра.*

*Кеше ғүмере төрлөсә. Берәүҙәр ғүмер буйы янып йәшәй, ялкыны башка йөрәктәргә күсеп, оскон кабыҙа, берәүҙәр ғүмер үтһен әйҙә, тип көн күрә. Бәғзеләр кеше яҙмышын, йәшәйеш асылын үҙ йөрәге аша үткәрә, яна, көйә, һыҙлана, халкына рухи аҙык өләшә. Үҙенең ғүмер асылын, йәшәйеш бурысын халкына, иленә хеҙмәт итеүҙә күрә.*

*Күренекле шағирә, өс тиҫтәгә якын китап авторы, әүҙем йәмәғәт эшмәкәре Кәтибә Кәрим кыҙы Кинйәбулатова тап ошондай шәхестәрҙең береһе. Үҙ яҙмышын ил яҙмышына иш иткән оло әҙибә хакында бөгөнгө һүҙебеҙ.*

Көньяҡ Урал типһенендә гүзәл Илмән ҡурсаулығы барлығын ишеткәнегеҙ йә күргәнегеҙ ҙә барҙыр. Ә уның ҡуйынында Арғужа күле ята. Ошо күлдең ҡап уртаһынан сығанағы Урал һырттарына барып тоташҡан Мейәс йылғаһы ағып үтә. Мейәс иһә Көньяҡ Уралдағы иң матур йылғаларҙың береһе. Йылға ярҙары буйында бик күп башҡорт ауылдары урынлашҡан. Мәүлет ауылы Мейәс йылғаһы Арғужаға сумып сығып, алты-ете саҡырым киткән урында төпләнгән.

Ил инәһе йәшен артмаҡлаған оло әҙибәнең тамырҙары зәңгәр күлдәр төбәге булған Силәбе яҡтарына, ярҙарын тилбер талдар уратҡан Мейәс буйҙарына, Арғаяш тарафтарына тоташҡан. Арғаяш районының Мәүлет ауылында тыуып үҫкән ул.

Силәбе — әҙәбиәтебеҙгә Ғәлимов Сәләм, Мөхәмәтйәров Хәй, Ҡадир Даян кеүек әҙиптәрҙе биргән төбәк. Халҡыбыҙҙың байтаҡ арҙаҡлы шәхестәре тыуып үҫкән төйәктә үҫеп буй етә Кәтибә апай. Ил ни күрһә, шуны күрә, тигәндәй, утыҙынсы йылдарҙың сәйәси золомо уларҙың ғаиләһен дә урап үтмәй. 1938 йылдың мартында уҡытыу эше менән шөғөлләнгән атаһын ҡулға алалар. Күпме генә көт-

мәһендәр, кире әйләнеп ҡайтмай Кәрим ағай... Ғүмер буйы көтөп, мөғжизәләр өмөт итеп йәшәне Кәтибә. Атаһы күңеленә сәсеп ҡалдырған оскондар шиғриәт офоғона тартты. Өфөгә уҡырға килгән ҡыҙ әҙәбиәт һәм сәнғәт донъяһына мөкиббән ғашиҡ була. Мандолинала өҙҙөрөп уйнағанын күреп, музыка училищеһына, һүрәтте матур төшөргәнен күреп, рәссам булырға саҡыралар уны. Әммә рабфакҡа төбәп килгәс, башҡа ергә бармай, улай-былай йөрөргә аҡсаһы ла юҡ. Ә тәүге шиғырҙары донъя күргәс, дөрөҫ юл һайлағанына тағы ныҡыраҡ төшөнә. Иң ҡыйын мәлдәрҙә лә шиғриәткә тоғро ҡала, ошо тоғролоҡ һәм тырышлыҡ уңыштар алып килә.

1939 йылда Өфөлә башлап яҙыусыларҙың ижадын яҡтыртҡан «Икенсе йыр» альманахы донъя күрә. Унда Кәтибәнең «Һөйлә, тарих» тигән шиғыры баҫыла.

Һөйләп бирсе, тарих, баш сайҡама,
Һин тормошто дөрөҫ беләһең.
Ҡатмар сәхифәнде аҡтарғанда
Бөтәһен дә асып бирәһең.
Һөйлә, тарих, һөйлә тартынмайса,
Йырла беҙгә дауыл йырҙарын,
Миллионлаған батыр легиондарҙың
Тетрәтеүен һуғыш ҡырҙарын...

Был юлдарҙың яҙылыуына алты тиҫтәнән артыҡ ваҡыт үткән, әммә улар бөгөн яҙылғандай актуаль яңғырай.

Ғөмүмән, Кәтибә апайҙың ижадына тыйнаҡлыҡ, эскерһеҙлек, ихласлыҡ хас, унда тыуған яҡтар киңлеген дә, шунда йәшәгән халыҡтың характерлы һыҙаттарын да тиҙ тойомлайһың.

«Башҡорт совет поэзияһының ғорурлығы шунда, уның сафында донъяға әсә күҙе менән ҡараған, заман заңын әсә ҡолағы менән ишетә торған, тормош шауын әсә теле менән һөйләгән бер ижад бар. Ул ижад Кәтибә Кәрим ҡыҙы Кинйәбулатова исеме менән бәйләнгән», — тип яҙғайны етмешенсе йылдарҙа ғалим Ким Әхмәтйәнов. Ғайса Батыргәрәй улы Хөсәйеновтың фекере лә раҫлай быны: «Кәтибә Кинйәбулатованың бөтә булмышы лирикала. Хатта уның «Бала нур» тигән атаҡлы поэмаһы ла драматик лириканан ғибәрәт. «Атай тауышы» менән «Тереләргә әйтер һүҙ» повестары ла шағирә ҡулы менән яҙылған. Кәтибә — шағирә тигән һүҙ. Тимәк, уның исеме есеменә тап килеп тора».

Башҡорт әҙәбиәтендә шағирә Кәтибә Кинйәбулатованың үҙ йыры, үҙ моңо, үҙ урыны бар. Күңел төпкөлөнә үтеп инер шиғырҙары, поэмалары, повестары яулаған уны.

Кәтибә апайҙы күптәр оҫта мандолинасы, ҡумыҙсы тип тә белә. Бейеү көйҙәренән башлап китә лә заманса көйҙәргә күсә, артабан моңло боронғо көйҙәрҙе сиртә генә: «Ауыл көйө», «Рамай», «Сибай», «Ҡолой кантон» һ.б. Һигеҙ тиҫтәне тултырған апайҙың тилбер бармаҡтары моң диңгеҙен тулҡынландыра ғына.

— Мандолина менән ҡумыҙ — минең ғүмерлек серҙәштәрем булдылар. Ҡатын-ҡыҙға тормош еңел бирелмәй. Айырыуса ижад өлкәһендә. Минең менән бергә йырланы, бергә иланы улар, — ти Кәтибә апай. — Уҙған ғүмер аҡҡан һыу кеүек инде, — тип уфтанып ҡуйҙы әңгәмә ваҡытында әҙибә. — Уйландыра ла, әсендерә лә ул. Берҙән-бер улымдың, Рамазанымдың минән алда донъянан китеүе үтә ауыр булды. Әле бына байтаҡ йылдар үткәс тә һушыма тулыһынса килә алмайым. Әле шул ейәнем, уның балалары хаҡында хәстәрлектәр менән йәшәйем. Ни тиһәң дә, мин иң элек әсә кеше, өләсәй. Минең бер китабым «Әсә һулышы» тип атала. Әсә һулышы — балала, ул балаһының һау-сәләмәт үҫеүе, атаәсәһенә, иленә бәхет килтереүе хаҡында хәстәрҙәр менән йәшәй. Илгә килгән һәр ҡайғы — ул минең дә ҡайғым, ил менән бергә ҡыуанам, ил менән хәсрәтләнәм.

Кәтибә апайҙың һуғыш ваҡытында яҙған «Партизан ейәнсәре» тигән әҫәре нигеҙҙә автобиографик характерҙа. Ошо замандың ялҡынлы йәштәре кеүек, ул да фронтҡа китеү теләге менән яна. Фронтҡа киткән ир-егеттәр урынына биологияны ла, тарихты ла уҡыта, колхоздың комсомол ойошмаһын да етәкләй. Шулай ҙа үҙен артабан

һуғыш яланында, алғы һыҙыҡта булырға тейеш тип иҫәпләй йәш ҡыҙ. Бер яҡтан, әсәһе лә йәл: өй тулы етем бала бит. Атаһы репрессия ҡорбаны булғанлыҡтан, «дошман балаларына» бер ярҙам да юҡ. «Мин фронтҡа китһәм, һеҙҙе ҡарарҙар ине», — тип йыуата Кәтибә әсәһен илаған сағында. Инде теләге тормошҡа ашты тип фронтҡа юлға сығырға торғанда ғына Кәтибәне колхоз идараһына саҡырталар. Район үҙәгенән ҡәтғи фарман килгән: «Кинйәбулатованы ебәрмәгеҙ, юғиһә мәктәпте ябырға тура киләсәк. Уға бында ла эш етерлек», — тигәндәр. Бына шулай, яҙмышмы, яңылышмы, Кәтибә тороп ҡала. Егеттәр, ҡыҙҙар тейәлешеп киткән арбалар күҙҙән юғалғансы, аҡ ҡар өҫтөндә бөҫығып илағаны әле лә хәтерендә.

Ә шулай ҙа тормош үҙ яйына дауам итә. Тырыш ҡыҙ күңеленә атаһы сәскән орлоҡтарҙы һулытмай. Бала сағынан уҡ йыр һәм шиғырҙар солғай уны. Бына шуға ла 12 йәшендә үк шиғыр яҙа башлауы һис тә ғәжәп түгел. Осраҡлы рәүештә бер шиғыры уҡытыусыһының күҙенә салына һәм район гәзите редакцияһына эләгә. Ул ғына ла түгел, шиғыр баҫылып сыға. Бына шунан һуң класташтары «шағирә» тип йөрөтә башлай Кәтибәне. Әммә ысын шиғриәт тойғоһо уға Өфөлә рабфакта, педагогия институтында уҡыған йылдарында килә. Үҙенең тәүге шиғри шәлкемдәрен тап ошо ваҡытта баҫтыра башлай әҙибә. Тәүге китабы 1954 йылда донъя күрә. 1955 йылда «Алтын тояҡ аҡ кәзә», артабан «Әнисә», «Бөркөт», «Айгүҙәлдең алтын аҫҡысы» кеүек шиғри һәм әкиәт йыйынтыҡтары баҫыла. Кәтибә Кәрим ҡыҙы «Атай тауышы» (1964), «Партизан ейәнсәре», «Тереләргә әйтер һүҙ» повестарының авторы, «Йәшел япраҡтар», «Һүнмәҫ мөхәббәт», «Лирика» һ.б. йыйынтыҡтары ла үҙ уҡыусыһын тапты.

«Минең Башҡортостанда булғаным юҡ, — тип яҙғайны П.Герасимов (Мәскәү). — Ләкин мин Кәтибә Кинйәбулатованың шиғырҙарын уҡыным, һәм талантлы башҡорт шағирәһе мине ҡулдарымдан етәкләп, үҙенең күркәм һәм бай республикаһын күрһәтеп йөрөгәндәй булды».

Халҡыбыҙға хас сифаттар хаҡында һүҙ сыҡҡас, Кәтибә апайҙың ҡарашы тағы ла балҡып, йәнләнеп китте.

— Иң элек кешелеклелек, тиер инем мин. Был сифат милләтебеҙҙең рухына, асылына нигеҙ ташы итеп һалынған. Борон-борондан килә был, тарих та шуны раҫлай, ул ғөрөф-ғәҙәттәребеҙ аша беҙҙең ҡанға һеңгән. Ҡасандыр күп һанлы милләт булып, йөҙҙәрсә, меңдәрсә саҡырымдарға һуҙылған ерҙәрҙе биләп йәшәгән халҡыбыҙҙың күңеле диңгеҙҙәй киң һәм тәрән. Үтә бер ҡатлылыҡмы, ихлас йомартлылыҡмы, уныһын әйтеүе ҡыйын, әммә урман-ҡырҙарын, ерҙәрен мул өләшкән, йәшәр урын таба алмаған күптәрҙе үҙенә һыйындырған. Әлбиттә, быны һәр кем үҙенсә баһалаған. Айҙар, йылдар, быуаттар үткән, ә халҡым үҙгәрмәгән. Шуға ла әлеге баҙар заманында йәшәүе еңелдән түгел уға. Рухи байлыҡты артҡа һөргән заман менән алышыуы ҡыйын. Шуға ла йәштәргә аманат рәүешендә шуны әйтер инем: үҙегеҙҙең тарихты, халҡыбыҙҙың ғөрөф-ғәҙәттәрен белегеҙ, иманлы булығыҙ, шулай ҙа заманса үҙаллыраҡ, белемлерәк, йылғырыраҡ булыу кәрәк. Ғөмүмән, халҡыбыҙҙа замандың ҡаты ҡанундарына ҡаршы торорлоҡ, үҙен һаҡлап йәшәрлек иммунитет булдырыу зарур.

Кәтибә апай әле лә ижтимағи, әҙәби мөхиттә әүҙем, һәр ваҡиғаны үҙ йөрәге аша үткәрә. Нимә шатландыра,ниҙәр хафаландыра әҙибә йөрәген?

Әле һигеҙ тиҫтәне артылғас та ил уйҙары, донъя хәстәре менән йәшәй шағирә. Башҡорт халҡының һан яғынан кәмеүе, эскелек, кешеләрҙең киләсәккә өмөтһөҙ ҡарашы борсой уны.

— Айырыуса башҡорттоң ирҙәмандарына үпкәм ҙур. Милләтебеҙҙе упҡынға этәрмәһендәр ине. Ҡарап тороуға һоҡланырлыҡ ирҙәр бар, һәләтле, белемле, ҡулдарында ут уйнатырлыҡтар. Әммә һөҙөмтәләр энә күҙеләй. Шундай мөмкинлектәр була тороп, ошо форсаттан файҙалана белмәйбеҙ.

Башҡортто бөтә донъя йөҙөндә беләләр, уның ихласлығы, кешелеклелеге, батырлығы хаҡында белмәгән илдәр юҡтыр. Беҙгә бары бер-беребеҙҙең ҡәҙерен белеп, бер-беребеҙгә терәк булып йәшәргә генә кәрәк. Ҡайһы ваҡыт уйлап ҡуям да, беҙгә тап ошо етешмәй, тим... Әйтәйек, чечен халҡы үҙенең милләттәше өсөн йәнен фиҙа ҡылырға әҙер — беҙҙә ул юҡ...

Әле шуға ҡыуанып бөтә алмайым: башҡорттарҙың беренсе ҡоролтайынан һуң күрше төбәктәр, бар донъяға һибелеп йәшәгән башҡорттар менән бәйләнеш ныҡ тотто, үҙ-ара аралашыу көсәйҙе. Был иһә мәҙәни үҫешкә генә түгел, милләт үҫешенә лә булышлыҡ итә.

Оло әҙибәнең бар ижады халҡының данлы үткәне, матур бөгөнгөһө, яҡты киләсәге хаҡында уйҙарға нигеҙләнә. Халыҡ рухы менән йәшәү — уны яҡлау тигән һүҙ.

— Һәр саҡ халҡым уйлағандан аҙ ғына алдараҡ, юғарыраҡ булырға кәрәк тип йәшәнем, шуға ынтылдым. Халҡымдың алтындарға биргеһеҙ аҡылын туплап, саҡ ҡына булһа ла ҡанатландырырҙай, өмөтләндерерҙәй, уйландырырҙай, дәртләндерерҙәй һүҙҙәр табаһым килде. Халыҡ аҡылы — ҡоромаҫ шишмә, тиҙәр. Халыҡ менән бергә йәшәп, ул күргәнде күреп, уның тураһында уйламау мөмкин түгел. Был эштә иң ҙур, иң яуаплы бурыс уҡытыусыларға йөкмәтелгән. Йәштәр күңеленә ҡанат ҡуйыу, уларҙы рухландыра белеү улар ҡулында. Быны мин 13 йыл уҡытыусы булып эшләгән кеше булараҡ әйтәм.

Әҙибә зарланырға яратмай. Тәҡдиренә яҙылған ғүмеренең бар миҙгелдәрен дә үҙенеке итеп ҡабул итә. Һәр көнө, айы, йылы эш, төрлө мәшәҡәттәр менән үткән. Хоҙай тарафынан үҙенә ошондай ғүмер, емешле ижад бүләк иткән яҙмышына һөйөнә. Иң ҡыуанғаны шул: эше лә, ижады ла йәнәш үҫеште. Йәш саҡта йәшлеге менән матур булһа, олоғайғас эше менән абруй өҫтәлде уға.

— Ғөмүмән, ижад эше мауыҡтырғыс, әммә ауыр сәйәхәт ул. Уны емешле һәм уңышлы итеү өсөн сикһеҙ түҙемлек, һайлаған шөғөлөңә мөкиббән бирелгәнлек талап итеlә, — ти әҙибә.

Кәтибә Кәрим ҡыҙы республикабыҙҙа ҡатын-ҡыҙҙар өсөн тәүге айырым баҫма — «Башҡортостан ҡыҙы» журналын ойоштороусы, уға нигеҙ ташы һалыусы, артабан ете-һигеҙ йыл буйы уны ҡурсалаусы шәхес булараҡ та билдәле. Ул замандарҙа өр-яңы журналдың сыға башлауы республика тормошонда, халҡыбыҙҙың рухи донъяһында хайран ҡалырлыҡ ваҡиға булғайны. Башҡорт әҙәбиәтендә ижади хеҙмәттәре менән хөрмәткә лайыҡ шағирә журналист булараҡ та әүҙемлеген күрһәтте, оҙаҡ йылдар «Башҡортостан ҡыҙы»ның тәүге мөхәррире вазифаһын атҡарҙы. Ул етәкләгән коллектив яңы баҫманың үҙ йөҙөн, үҙ урынын таба алды. Әлеге көндә Башҡортостанда ғына түгел, күрше төбәктәрҙә лә яратып уҡылған был журналдың киләсәген дөрөҫ күҙаллаусы, уның халҡыбыҙ, айырыуса ҡатын-ҡыҙҙар тормошонда мөһим роль уйнаясағын асыҡ күрә белгән шәхес булды Кәтибә Кәрим ҡыҙы.

— Эшләгән эшем юҡҡа китмәне тип ғорурланырға хаҡым бар, — тине Кәтибә апай журнал хаҡында һүҙ сыҡҡас. — Бөтә ижади эшемде ҡалдырып, ойоштороу эшен алып барҙым бит. Халыҡ өсөн эшләйем тиһәң, ниндәйҙер кимәлдә ваҡытыңды ла, һәләтеңде лә йәлләмәҫкә кәрәк. Тик шул саҡта ғына эшең ҡыуанырлыҡ та, йыуанырлыҡ та була. Журналдың йылдан-йыл зауыҡлыраҡ, матурыраҡ була барыуына, уны алдырып уҡыусылар һанының артыуына ҡыуанып бөтә алмайым.

Оло әҙибә яҡташтары — силәбеләр, арғаяштар менән тығыҙ бәйләнеш тотоп йәшәй. Улар иһә, йомоштары төшһә, иң элек күҙ төбәп Кәтибә апайға киләләр. Береһенең дә үтенесен кире ҡаҡмай әҙибә, хәленән килгәнсә, булдыра алғанса ярҙам итә. Әле бына Силәбе башҡорттарының әүҙем ижтимағи-сәйәси мөхиттә йәшәүендә уның да тос өлөшө бар.

Шулай, туҡһанынсы йылдар башында Владимир Бородкин тигән яҙыусының тәҡдиме менән Силәбелә Тевкелевҡа һәйкәл проекты әҙерләүҙәрен әйттеләр. Был хәбәр

аяҙ көндө йәшен һуҡҡандай тәьҫир итте әҙибәгә. Етмеш йәшлек юбилейын үткәрергә ҡайтыуы ла онотолғандай булды. Үҙе менән килгән яҙыусылар Әсхәл Әхмәт-Хужа, Тамара Ғәниева һ.б. менән бергәләп Тевкелевтың асылын асып һалдылар. Уның хилаф эштәре, башҡорт халҡының Тевкелев арҡаһында ыҙа сигеүҙәре, баш-баштаҡлыҡтары хаҡында һөйләнеләр.

— Тарихты, халыҡ хәтеренә мәңгелеккә уйылғанды алып ташлау мөмкинме һуң? Тевкелевҡа бәйле «Тәфтиләү» йырының тарихын тағы бер аңлатып бирҙем. Етәкселәр беҙҙе ихлас тыңланы һәм ғәфү үтенделәр. Беҙҙең был сығыштарыбыҙҙың һөҙөмтәһе шул булды: иртәгеһен Силәбе яҙыусылар союзына проектты кире ҡағыу тураһында ҡарар ҡабул ителеүен хәбәр иттеләр.

Тағы бер миҫал. Силәбелә революцияға тиклем үк эшсе-крәҫтиән көсө менән йыйылған башҡорт китапханаһы эшләп килә. Кәтибә апайҙың, башҡа яҙыусыларҙың тәҡдиме менән уға Шәйехзада Бабич исеме бирелде. Әлеге ваҡытта был китапхана иркен бинала урын алған, китаптар фонды бик бай. Бына шулай яҡташтары, халыҡ өсөн мөһим эштәр менән янып йәшәй әҙибә.

Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, «Почет билдәһе» ордены кавалеры Кәтибә Кәрим ҡыҙы индәренә ил йөкмәгән бурысты ихласлыҡ һәм әүҙемлек менән атҡарып йәшәй.

Афарин, оҙаҡ йылдар шулай дауам итһен!

*Кәтибә КИНЙӘБУЛАТОВА*

## Туған телем

Атай, тигәндә лә һин кәрәк,
Инәй, тигәндә лә һин кәрәк.
Тыуған ерем, айым, ҡояшым,
Тип әйтһәм дә, телем, һин кәрәк.

Халҡы өсөн ирек даулаған,
Тыуған илен ҙурлап данлаған,
Салауаттай мәңге тере һин, —
Башҡортомдоң үлмәҫ теле һин.

Атай, тигәндә лә һин кәрәк,
Инәй, тигәндә лә һин кәрәк. —
Күңелемдең һүнмәҫ нуры һин,
Мәңге йырланасаҡ йырым һин.
Моңло-йырлы туған телем һин.

## Юҡ һуҙ юрамағыҙ!

Ҡартайҙыммы?
Юҡты юрамағыҙ.
Һаман шул көйө лә күңелем.
Йөрәкәйем ҡаға, ярһып саба,
Йырҙар әйҙәлешә түгелеп.

Ҡартайҙыммы?
Юҡты һөйләмәгеҙ!
Мөхәббәтем тере-тамаша.
Йырҙарым бит ана-а-ау йылдағылай
Йәшлек хистәремә тоташа.

Ҡартайҙыммы?
Юҡты уйламағыҙ.
Күңелдәрем яҙғы гөл-баҡса.
Ана нисек һандуғастар һайрай,
Һөйөү, һөйөү генә был башта.
Ҡартайған тип юҡты һөйләмәгеҙ...

## Эй был тормош!

Эй был тормош шундай ҡәҙерле лә,
Көндән көнгә етеү ни тора!
Төндәр етһә, күктә ҡыйырсыҡ ай,
Алсаҡ йондоҙҙары ялтырай.

Эй был тормош шундай ҡәҙерле лә
Йүгерә-йүгерә эшкә сабыуҙар...
Кис етеүгә күпме эш башҡарып,
Үҙеңә-үҙең хайран ҡалыуҙар,
Рәхәтләнеп арып-талыуҙар...

Эй был тормош шундай ҡәҙерле лә,
Аңлап ҡына түгел бөтмәле.
«Таң ата ла көндәр кис була», тип,
Кемдәр генә йөҙәп әйтмәне.
Ә шулай ҙа фани донъяларҙан
Бер кем, бер кем теләп китмәне...
Эй был тормош шундай ҡәҙерле лә...